*Сабит УТАРБАЕВ*

Абруйлы «Ватандаш» журналында минең ҡарт олатайым Сибаев Шәйәхмәт Утарбай улының йыры «Сибай» тураһында Рәүеф Насировтың һәм Азат Камаловтың мәҡәләләре донъя күрҙе. Унан алдараҡ «Ағиҙел» журналында Рәшит Әхтәри ҙә үҙенең шул йырға ҡарата мөнәсәбәтен, ул йырҙың килеп сығыуына үҙ ҡарашын яҙғайны.

Тәүҙә үҙемдең шәжәрә менән таныштырып сығыу кәрәктер. Мин — Сабит Утарбаев, минең атай Сәмиғулла Утарбаев, атайымдың атаһы Сабир Сибаев. Ҡартатайымдың атаһы Шәһәрғәҙе Сибаев, уның атаһы — ошо данлыҡлы «Сибай» йырының һәм һүҙҙәренең авторы Шәйәхмәт Сибаев (1821 йылда тыуған). Шәйәхмәт бабамдың атаһы — Утарбай Сибаев, ә Утарбай бабамдың атаһы — Сибай Тәнәкәйев, ә Тәнәкәйҙең ҡартатаһы — Атайсал. Атайсал ҡартолатамдың улы Аҡмырҙа тархан дәрәжәле кеше булғанын беләбеҙ. Сибай ҡартатама килһәк, ул Иҫке Сибай ауылына исем биргән ир уҙаманы. Уның ейәне Шәйәхмәт Утарбай улы, хәрби етәксе, кантон башлығы ғына түгел, «Сибай» йыры килеп сығыуға сәбәпсе кеше.

Ғата Сөләймәнов («Ағиҙел» журналы, 1993, №11, 153-сө бит): «Лирик характерҙағы был мәшһүр йыр моңо, аһәңе, камиллығы менән кешеләргә ҙур эстетик зауыҡ бирә, быуындан-быуынға күсә килә һәм йәшәй...» Ә мин өҫтәр инем, «Сибай» йыры башҡорт иленең «Урал», «Буранбай» һәм башҡа ғәййәр йырҙары менән бер рәттән башҡорт халҡының классик йырҙары иҫәбенә ингән йыр, тип.

Беҙҙең башҡорт менталитетының бер насар яғы бар, үҙ халҡыбыҙҙың ҡаҙанышын кәмһетеү менән мауығабыҙ. Ошо көнгә еткереп, һаҡлап, хөрмәт итеп килгән йырға ҡарата килешмәҫ ҡарашлы мәҡәлә тыуҙырып ятыусы үҙебеҙҙең башҡорт ғалимдарына үпкәләп ҡуяһың. Ә бит халыҡ үҙ итеп яратмаһа, күптән онотолоп сүпкә ташланыр ине инде. Мин ошо күҙлектән сығып, ошо йырҙың авторының ейәне булараҡ, ризаһыҙлыҡлыҡ белдерәм. Ҡәтғи иҫбатлаусы дәлиле булмай тороп, матбуғатта сығыш яһауҙан һаҡ булыу кәрәктер ул. Милли үҙаңын юғалта барған быуынға бындай мәҡәләләр кире йоғонто яһамаҫ микән, тип тә хафаланам.

«Сибай» йыры көйөн ҡасандыр «Сибайыл» тигән автор сығарып, шуны Шәйәхмәт Утарбай улы үҙ иткән һәм үҙ һүҙҙәрен ҡушып, кантон башлығы булыуҙан файҙаланып, ил буйлап таратып ебәргән» — Рәшит Әхтәри мәрхүмдең «Ағиҙел» журналындағы версияһы шулай. Әгәр ул шулай икән, был мотив электән билдәле булғас, уны Сибаев Шәйәхмәттән алдағы кантондар ни эшләп ҡулланмағандар? Тағы шуға иғтибар итәйек: Баймаҡ, Хәйбулла, Әбйәлил, Бөрйән райондары сәсәндәргә бай. Әйтәйек, беҙҙең Иҫке Сибай ауылынан ғына ла ике йыр сыҡҡан. «Сибай», «Абдрахман», уның эргәһендә ятҡан Төйәләҫ йылғаһы иseme менән йөрөтөлгән «Төйәләҫ» йырҙары... Шул уҡ ваҡытта штаб йорто Иҫке Сибайҙа булған һәм 1789 йылдан алып унда тәүге кантон башлығы Аҡкол тураһында халыҡ бер ҙә маҡтап йыр сығармаған, туғанының улы «Абдрахман»ға йыр бар. Ә «Сибай» йырының «Абдрахман» йырынан күпкә айырылып торғанын һәр кем үҙе тойоп белә. Тыуған илде, туған тупраҡ-

ты, дуҫ-иште, һөйгән йәрҙе мөкиббән китеп яратыу кеүек изге тойғо менән һуғарылғанлығы күңелгә хуш килә һәм үҫеп килгән үҫмер өсөн ҙур тәрбиәүи көскә эйә.

Нисек кенә итеп «Сибай» йырын Шәйәхмәт Утарбай улы Сибаевтың әҫәре түгел тип ҡарамаһындар, ул йыр уға тәбиғи йәбешкән, уның айырылғыһыҙ өлөшө иҫәпләнә. Тере ейәндәре иҫән була тороп, Сибаев Шәйәхмәттең «Сибай» йыры тураһында матбуғатта ҡәтғи дәлилһеҙ сығыш яһау бик үк ҡулай түгел. Шуға күрә, атаолатайҙар, ҡартатайҙар, атайым һәм олатайымдар иҫтәлеккә ҡалдырған, ауыл ҡарттары һәм туғандар-тумасалар ҡомартҡыһы булғандарҙы уҡыусыға еткергем килә. Рәүеф Насировтың, «Сибай» йыры авторы Ишмөхәммәт сәсән, ә Азат Камаловтың («Ватандаш», 2000 й., №2. «Атайсал»), ҡартолатайым Утарбай Сибаев, тип сығыш яһауы мине ошоларҙы яҙырға этәрҙе.

А. Камалов ошо турала «Башҡортостан пионеры»ның 1969 йылғы 4 апрель һанында яҙып сыҡҡайны инде. «Сибай» йыры тураһында төрлө фекер күп ине, ярай, ул да бер версия булһын тип, ул саҡта иғтибарһыҙ ҡалдырылды. Мин ул саҡта 10 класта ғына уҡый инем әле. Хәҙерге кеүек, шәжәрәгә, тарихҡа иғтибар биреү тигән нәмә ят ине. Хәҙер иғтибар ҙа етәрлек, үҙем дә донъяуи ҡараштамын, бала түгелмен, йәш тә бара.

Түбәндә Шәйәхмәт ҡартолатам Сибаевтың ҡыҫҡа ғына йәшәү дәүере йылдарын килтерәм:

1821 йылда тыуған.

1838-40 йылдарҙа казак,

1940-43 йылдарҙа йорт писаре була;

1843-48 йылдарҙа кантон писаре итеп билдәләнә;

1848-52 йылдарҙа Уральскийҙа хеҙмәт итә, һуғышта ҡатнаша;

1852-53 йылдарҙа 7-се кантон йорт старшинаһы булып тора;

1853-63 йылдарҙа 6-сы кантон башлығы була;

1855-58 йылдарҙа Аҡмәсет һуғышында йөрөй.

Ул 40-42 йәшендә генә вафат булып ҡала. Үҙ үлеме буламы ул, башын ашайҙармы? Уның биографияһының ошо өлөшө төрлө легендалар менән тамамланған. Был турала бер ни тиклем мәғлүмәт беҙҙең дәүергә йырҙар менән генә килеп етә. Үҙегеҙгә мәғлүм, һәр ҡәләм тотоп яҙа белгән кеше уйхистәрен шиғри юлдар менән яҙып маташа. Шәйехмәт Утарбай улы Сибаев заманына күрә уҡымышлы, зиһенле, шул ваҡыттағы әҙәбиәт, сәсәнлек ижады менән мотлаҡ таныш булған кеше. Үлемесле һуғыштар үҙе үк кешенең күңел донъяһын аҫтын өҫкә әйләндереп сығара. Тыуған илде, туған-тумасаны һағынып йәшәүҙең ҡәҙерен тойоу һәм һөйөү хистәренең иң юғары нөктәгә күтәрелеп, күңелде болоҡһотоуы, йөрәкте ярһытыуы ғәжәп түгел.

Шәйәхмәттең йырҙарының, уның шиғри әйтемдәренең беҙгә килеп еткән өлөштәрен генә барлап сыҡһаң, уның биографияһын бермә-бер сағылдырып баралар түгелме, тигән һорау тыуа. Ә беҙгә килеп етмәгәндәре бихисап бит. «Сибай» йырын һәм Шәйәхмәттең шиғри әйтемдәрен өҙөп-йыртып ҡарау етешһеҙлек бирә, имеш-мимешкә юл ҡуя.

Тәүҙә Шәйәхмәт Утарбай улының «Сибай» йыры варианттарын, уның Фатимаға арналған шиғри әйтемдәрен (билдәле булғандарын), Фатиманың ҡара-ҡаршы әйтемдәрен барлап ҡарайыҡ:

1-се вариант:

*Йәшел генә сана, зәңгәр дуға*
*Ектерһәнә, Фатимам, туры атҡа.*
*Атайсалға ҡайтып кантон булһам,*
*Ирешер инем, Фатимам, моратҡа.*

Йә булмаһа, өсөнсө юл ошолай йырлана:

*Атайсалды ҡайтып күрә алһам,*
*Ирешер инем, Фатимам, моратҡа.*

*Кәкүк тә генә сакырыр, ай,*
*ер түгел,*
*Сакырһа ла күркәм үк түгел,*
*Илама ла, Фатимам, ай, илама,*
*Йүгереп-атлап ҡайтыр ер түгел.*

Йәки ошолай ҙа йырлайҙар:

*Һандуғастар һайрар, ай, ер түгел,*
*Һайраһа ла туғайы киң түгел.*
*Илама ла, Фатимам, ай, илама,*
*Йүгереп-атлап етер ҙә ер түгел.*

2-се вариант:
*Иртән генә тороп, ай, караһам,*
*Ҡыркты менән Өрпәк күренә.*
*Ерһенмәйем, Фатимам, сит ерҙәрҙе,*
*Заруратта күркәм күренә.*
*Йәшел генә сана, зәңгәр дуға,*
*Еткерһәнә, Фатимам, туры атка.*
*Илама ла, Фатимам, ай, илама,*
*Ҡайтып кына булмай тыуған якка.*

3-сө вариант:
Тәүге күплеты 2-се вариант кеүек, ә икенсе строфа ошолай бөтә:
*Тамьян ғына тигән, ай, илдәре*
*Ерһенеп тә йәшәр ил түгел.*
*Илаһаң да, Фатимам, һарғайһаң да*
*Йүгереп кенә кайтыр ер түгел.*

4-се вариант:
*Һауаларҙа оскан, ай, карсыға*
*Кәйелә-кәйелә килә кош күреп.*
*Йөҙ илле лә керпек күҙен йомоп,*
*Көтәме икән Фатимам төш күреп.*

Йәки ошо төрө лә бар:
*Ебәк кенә баулы күк карсыға*
*Талпына ла микән, кош күреп.*
*Эй-й... Киң түшәккәйҙәрен тарҙар йәйеп,*
*Көтә лә микән Фатимам төш күреп.*

5-се вариант:
*Ҡарағай ҙа такта, йәшел капка,*
*Асыла ла ябыла ел сакта.*
*Алып килсе кәләм, яҙайым сәләм,*
*Ғәзиз башым, Фатимам, һау сакта.*
*Ебәк кенә баулы көмөш кылыс*
*Талдарҙы ла нәҙекәй билемде.*
*Ҡалһа калһын катай, ай, еркәйең*
*Күргем килде тыуған илемде, —*
тип тә башлана.

*Ебәк кенә билбау осо ла ука,*
*Килешә лә бит минең билемә,*
*Бәхил генә булһын ағай-эне,*
*Ҡайталманым тыуған илемә.*

Былар бөтәһе лә «Сибай» көйөнә йырлана. Быныһы шиғри әйтемдәренең беҙгә килеп еткәндәре:
*Фатимакай, һиңә хат яҙғанда,*
*Ҡаҙ канаты миңә кәләмдер.*
*Хаттарыма каршы хат яҙмаһаң,*
*Һине һөйөүҙәрем хәрәмдер.*

*Нескә генә билле тура аттарым,*
*Ҡыш көндәрен тибә, ай, тибен.*
*Ҡош аркылы сәләм әйтер инем,*
*Белеп кенә булмай кош телен.*

*Алыҫтарҙан да карайып, ай, күренгән*
*Иҙел башы Ирәмәл тау микән?*
*Фатиманы күреп, ай, сәләм әйтегеҙ,*
*Дуҫ-иштәрем башы һау микән.*

*Һыу буйҙарында, ай, ак күбек,*
*Йөҙөк һалып, Фатимам, һабын ит.*
*Хак тәкдирҙәргә, ай, сара юк,*
*Түҙем булсы, Фатимам, сабыр ит.*

Фатима менән Шәйәхмәттең шиғри әйтемдәре:
Фатима:
*Баксаларҙа үскән баҙыян гөл,*
*Араһына елдәр үтәрме?*
*Үҙ инәңде күреп һөйләшмәгәс,*
*Хатка яҙып, һүҙҙәр бөтәрме?*

*Өйөр ҙә генә өйөр йылкы килә,*
*Алдан ғына килә турыһы.*
*Килешмәгән генә ерҙәрең юк,*
*Тик килешмәй елкән ороһо.*

Шәйәхмәт:
*Ебәк кенә ялын туратымдың*
*Ҡайһы якка ғына тарайым...*
*Бәйелдәрең аҙа, ай, Фатимам,*
*Ней әмәлдәр итеп тә карайым?*

Р. Үтәғолов, Т. Ғарипова («Башҡортостан» гәзите, 21 ғинуар, 1997 йыл) авторлығында бирелгән «Уралҡайым ултыра үҙәгемдә...» мәҡәләһенә иғтибар итәйек:

*Йыла ла ғына табан, саған сана*
*Аралдарҙан елә Аралға...*
*Үҙем үлгәс, йырым йырлап кайтһаң,*
*Атым-санам кайтһын Уралға...*
*Ҡылыс кына кайрар ташлы ерҙәр,*
*Былбыл ғына һайрар ер түгел.*
*Уралымдан кәкүк сакыра мы ни,*
*Мин, Сибайың, кайтыр ер түгел.*
*А-һа-ай...*
*Ҡайтыр ир түгел...*
*Инәм Илсебикә инселәгән*
*Ҡолағыма тағың алкамды,*
*Атам Урал атлап катлап тарткан*
*Күкрәгемә һалһаң калканды.*

*А-һа-ай...*
*Ауырттырмай, йомшағырак*
*куйың,*
*Мендәрҙе аҙ күргән аркамды.*
*Уралкайым ултыра үҙәгемдә.*
*Ук башағы ултыра бөйөрҙә.*
*Хантүрә лә теләгән якка сапмай,*
*Бойорок менән йөрөй был ерҙә.*
*Һа-ай-й...*
*Үҙ бойороғом үҙәгемә үтә,*
*Ят бойороғо ята бөйөрҙә.*

*Атайсалым, Урал, дүрт күҙ менән*
*Күҙләр инем, һүнде, күҙем юк.*
*Яндырып яуҙы кыуғас, йырым*
*кайта,*
*Атым-санам кайта, үҙем юк.*

Хәҙер, ошо йырҙар вариантына, шиғри әйтемдәргә, Шәйәхмәттең хатының юлдарына иғтибар итһәң, ул ҡәләм тибрәтмәçлек әҙәм булмаған бит!

Халыҡ күңелендә һаҡлаған көйө һәм һүҙҙәре генә быуындан-быуынға бирелгән, ҡурайсылар көйләгән, йырсылар йырлаған. Ә «Башҡорт халыҡ ижады»ның «Йырҙар» өлөшөнә килеп инеүенә беҙ рус яҙыусыһы С.Г. Рыбаковҡа һәм башҡорттарҙан Баймаҡ районы I Этҡол ауылы йырсыһы Батыргәрәй Юлыевҡа бурыслыбыҙ. Рәшит Әхтәри мәрхүм әйтеп ҡалдырған версия менән һүҙ көрәштерергә намыçым етмәй, сөнки ул гүр эйәһе. Ләкин уның версияһы ла ҡомдан төҙөлгән. Азат Камалов үҙенең (башта әйтеп үтелгән баçмаларҙа) мәҡәләһендә «Сибай» йырының ике юлын ғына «ҡырҡып» алып ҡарай.

Йә үле, йә тере ҡайтыу фәжиғәһе кисергән Шәйәхмәт былай ти:

*Һыр буйынан сыккан мәлдә,*
*Беләкәйҙәрем талды ишкәндә.*
*Ултыра ла торғас, көйләй инем,*
*Йорт-илдәрем иçкә төшкәндә.*

Был һүҙҙәр сәсән йөрәкле, сәсән шөһрәтле кеше, һуғыш дәһшәтенә шаһит кешенең һағышлы һүҙҙәре.

Утарбай ҡартбабайым — Шәйәхмәттең атаһы — 1832 йыл Себергә һөргөнгә ебәрелә. Шәйәхмәт был хаҡта асыҡ әйтә:

*Тамьян ғына тигән ай илдәре*
*Ерһенеп тә йәшәр ил түгел.*

Бер ҙә генә:
*Себер генә тигән ай илдәре*
*Ерһенеп тә йәшәр ил түгел, —*
тип йырланмай.

«Ерһенеп» тигән һүҙ әсиргә ебәрелгән кеше һүҙе түгел, ә ниндәйҙер кәрәклек менән күсенеп киткән кеше Шәйәхмәттең генә һүҙе.

*Йәшел генә сана, зәңгәр дуға*
*Еткерһәнә, Фатимам, туры атка, —*
тип әсир кеше бойороҡ бирә алмай, быны дәрәжәле, шундай мөмкинселеге булған кеше әйткән. Ул Шәйәхмәт һүҙе.

Утарбай ҡартбабам Батима ҡартәсәм менән бергә Себергә һөрөлмәгән. Батима ҡартәсәй Атайсал ауылында зар илап, ире Утарбайҙан тороп ҡалған...

*... Алып килсе, кәләм, яҙайым*
*сәләм*
*Ғәзиз башым, Фатимам, һау*
*сакта...*

— тип Шәйәхмәт Сибай кантон ғына ҡуша ала эргәһендә йөрөгән Фатимаға. Ә Утарбай ҡартбабам ундай мөмкинселектән мәхрүм булған.

Хәҙер йылдарҙы сағыштырайыҡ. 1832 йыл Утарбай ҡартатам Себергә һөргөнгә ебәрелгән. Ул «ристан» кешегә ауыл халҡы менән йыр йырлап бәхилләшергә ул ваҡыттағы закондар менән кем мөмкинлек бирһен?! Ә Сибай Шәйәхмәт 1858 йылда 6-сы кантон етәксеһе итеп тәғәйенләнгәс, бөтә туған-тумасаһын, Атайсал ауылы кешеләрен бер түбәлеккә һаубуллашыу мәжлесенә саҡыра. Ул түбәлек шул ваҡыттан әлегәсә «Сибай биләне» тип йөрөтөлә. Был турала Иçке Сибай ауылы ҡарттары быуындан быуынға һөйләп ҡалдырып килә. Ана шул «Сибай биләнендә» Шәйәхмәт тәү башлап ишеттергән йырын «Сибай» тип атағандар. Шуныһы ла ихтибарға лайыҡ: «Шәйәхмәт» түгел, ә мотлаҡ «Сибай» тип исемләгәндәр.

*Кантон башы булып, ай,*
*мин киттем*
*Ҡатай менән тамьян иленә*
*Ак корбандар салып, нәҙер әйтеп*
*Ҡайтһам ине тыуған илемә...*

Халыҡ илашып, уны бик оҙаҡ оҙатып барған.

*Билемдәге ебәк билбауымды*
*Сискеләрем килмәй билемдән.*

*Ҡатай илдәренә кантон булып*
*Киткеләрем килмәй илемдән, —*

тип Утарбай ҡартатам йырламаған, ә уның улы Шәйәхмәт йырлай-йырлай алыҫ илгә ҡуҙғалған.

Ошоға тиклем был йырҙың көйө лә, һүҙе лә ишетелгән, йырланған тигән һүҙ юҡ. Булһа бер осо сығыр, ул турала беҙҙең тирәлә хәбәр-хәтер йөрөр ине. (Әгәр Утарбай йыры булһа).

Унан, «Сибай» йырын, көйөн Себер һынлы ерҙән ҡартатай кеүек йырлап ишеттереүсе, Утарбай ҡартолатай менән бергә һөргөн күреүсе ҡасҡын ғына еткерә ала. Ул бик талантлы кеше булырға тейеш була лаһа?!

Бик күп тарихи факттар, дәлилдәр «Сибай» йырын Утарбай Сибаев йыры тип әйтеүгә урын ҡалдырмай.

Рәүеф Насиров мәҡәләһендә «Сибай» йыры һүҙҙәре Ишмөхәмәт сәсәндеке тип ҡарау версияһы ла бик үк ныҡлы түгел, сөнки Шәйәхмәт Ишмөхәмәт менән 1858-1859 йылдарҙа ғына таныш-белеш булыуы асыҡ. Ә бит Шәйәхмәттең шиғри һүҙҙәре, йырҙары ул датанан алдараҡ тыуа. Йыры, әлбиттә, 1858 йыл тыуа, сөнки Шәйәхмәт йырлап оҙатылып киткән йылға тура килә. Шәйәхмәттең хеҙмәт йылдарында яҙған шиғри һүҙҙәрендә «Сибай» йыры һүҙҙәренә яҡынлыҡ күп.

«Сибай» йыры варианттарын байҡап, шиғри әйтемдәрен күҙләһәң, улар Шәйәхмәттең биографияһын оҙатып барғанын тояһың.

*... Ҡалһа ҡалһын, ҡатай, ай,*
*еркәйең,*
*Күргем килде тыуған илемде...*

Йәки:

*Бәхил генә булһын ағай-эне*
*Ҡайталманым тыуған илемә...*

Йәки:

*Эй-й, алып килсе ҡәләм, яҙайым*
*сәләм,*
*Ғәзиз башым, Фатимам, һау*
*сакта...*

Иң һуңғы, хәлһеҙ минуттарын тасуир итеүсе һүҙҙәренә хәтлем ошо фекеремде нығыта.

Шулай итеп, Шәйәхмәттең билдәле һүҙҙәрен, йырҙарын өҙөп-өҙөп ҡарарға ярамай. Ә уны биографияһы менән бәйләп бер бөтөнлөктә өйрәнеү кәрәктер.

Ҡалай ғына булмаһын, «Сибай» йырына Шәйәхмәт һүҙ яҙған, көй тапҡан һәм йән өргән. Ул йыр уның исеме, биографияһы менән үрелгән, шуға күрә Шәйәхмәт үҙ йырына үҙе лайыҡ. Уның йырын икенсе берәүгә көсләп тағыу кәрәкмәҫ. Ишмөхәмәт сәсәндең дә уға мохтажлығы юҡ. Быйыл, иншалла, Шәйәхмәт Сибай сәсәндең тыуыуына 180 йыл. Ошо датаны ҙурлап, хөрмәтләп иҫләп үтеү беҙгә — иҫән быуынға — насип һәм сауап эш.